# Балаларға бағышланған Изге Яҙмалар

Тәқдим итә

# Ғайсаның тыуыуы



Автор: Edward Hughes

Кәүҙәләндерелгән: M. Maillot
Alastair Paterson

Яраҡлаштырылған: E. Frischbutter; Sarah S.

Тәржемә: www.christian-translation.com

Сығарылған: Bible for Children
www.M1914.org

©2021 Bible for Children, Inc.
Лицензия: Һеҙҙең күсермәгеҙ һатыуға тәғәйенләнмәгән булһа,
был хикәйәне күсерергә йәки баҫтырырға хоҡуҡығыҙ бар.

Ҡайсандыр Алла Ғабраил фәрештәһен Мәрйәм исемле йәш йәһүд ҡыҙына ебәрҙе.  Ул уға: “Һин ул тыуҙырырһың һәм уға Ғайса исемен бирерһең.  Ул Аллаһы Тәғәләнең Улы тип аталыр.

Ул мәңге быуаттын быуттарға батшалыҡ итәсәк” тигән.



“Нисек шулай була ала?”- тип һораны аптыраған ҡыҙ.  “Минең әле ирем дә юҡ”.  Бала Алланан буласаҡ тип әйтте Фәрештә Мәрйәмгә.  Уның ер атаһы булмаясаҡ.



Шуннан һуң фәрештә Мәрйәмгә үҙенең ике туғаны Елизаветаның йәш булмаған килеш, бала табыуы тураһында әйтте.  Был шулай уҡ мөғжизә ине.  Мәрйәм Елизавета янына килде.  Улар бергәләп Алланы данланылар.



Мәрйәм Йософ менән йәрәшкәндәр ине. Йософ Мәрйәмдең бала көткәнен белгәс, бик ҡайғырҙа.  Ул баланың атаһы башҡа кеше тип уйлаған.



Алла фәрештәһе Йософҡа төштә бала Алла Улы икәнен әйтте.  Йософ Мәрйәмгә Ғайсаны үҫтерергә ярҙам итергә тейеш ине.



Йософ Аллаға ышанды һәм уға буйһондо. Ул шулай уҡ ил закондарына буйһондо. Яңы закон көсөнә ингәс, ул һәм Мәрйәм һалым түләү өсөн тыуған ҡалаһы Вифлеемға киттеләр.



Мәрйәм бала табырға әҙер ине.  Ләкин Йософ бер ҡайҙа ла айырым бүлмә таба алманы. Бөтә ҡунаҡханалар ҙа тулы ине.



Ниһәйәт, Йософ аҙбар тапты.  Унда Ғайса сабый тыуҙы.
Мәрйәм уны яслегә һалды, ғәҙәттә
хайуандарға аҙыҡ бирә
торған урын.



Яҡында көтөүселәр йоҡлаған һарыҡтарын һаҡлайҙар ине. Алла фәрештәһе пәйҙә булды һәм уларға иҫ киткес хәбәр һөйләне. “Бөгөн һеҙҙең Дауыт Ҡотҡарыусы ҡалаһында бала тыуҙы – Хужабыҙ Христос.



Һеҙ баланы яслелә ятҡан килеш табырһығыҙ”.

Кинәт күп фәрештәләр пәйҙә булдылар, Алланы данланылар һәм: “Аллаға дан, Куктәрҙә һәм ерҙә тыныслыҡ, кешеләҙә – яҡшылыҡ”, - теләнеләр.



Көтөүселәр аҙбарға ашыҡтылар. Сабыйҙы күргәс, улар фәрештәләрҙең Ғайса тураһында нимә әйткәндәрен һәр бер осраған кешегә һөйләнеләр.



Ҡырҡ көндән һуң Йософ менән Мәрйәм Ғайсаны Иерусалим ғибәҙәтханаһына килтерҙеләр. Унда Симеон исемле кеше Бала өсөн Алланы данланы.  Алланың тағы бер хеҙмәтсеһе, ҡарт тол ҡатын Анна, Хоҙайҙы мактаны.



Улар икеһе лә Ғайсаның Алла улы,
вәғәҙә ителгән Ҡотҡарыусы
икәнен беләләр.  Йософ
ике ҡошто ҡорбан итте.
Яңы тыуған сабыйҙы
Хоҙайға килтергәндә,
Алла законы
буйынса, ярлы
кешеләр
ошондай
ҡорбан
килтерергә
тейеш ине.





Һуңыраҡ махсус йондоҙ аҡыл эйәләрен көнсығыш илдән Иерусалимға алып килде.



“Ҡайҙа Ул, Алланың тыуған батшаһы?” - тип һоранылар улар. “Беҙ Уға табынырға килдек”.

Ирод батша аҡыллы кешеләр тураһында ишетте.  Борсолоп, ул Ғайсаны тапҡас, уға әйтергә ҡушты.  “Минең дә уға табынаһым килә”, - тине Ирод.  Ләкин ул ялғанлай ине.  Ирод Ғайсаны үлтерергә теләгән.



Йондоҙ аҡыллы кешеләрҙе тура Мәрйәм һәм Йософ Ғайса менән йәшәгән йортҡа алып китте. Сәйәхәтселәр хөрмәт менән теҙләнеп, Ғайсаға бай бүләктәр һәм хуш иҫтәр бирҙеләр.



Алла аҡыллы кешеләргә өйҙәренә йәшерен рәүештә ҡайтырға ҡушты. Иродтың асыуы сыҡҡан. Яуыҙ хаҡим Ғайсаны юҡ итергә ниәтләп, Вифлеемдағы барлыҡ ир-ат сабыйҙарын юҡ итте.



Ләкин Ирод Алла
Улына зыян итә
алманы!  Алдан төштә
киҫәтелгән Йософ
Мәрйәм менән
Ғайсаны Мысырға
алып китте.



Ирод үлгәс,
Йософ Мәрйәм
менән Ғайсаны
Мысырҙан алып
ҡайтты.



Улар Ғәлиләй диңгеҙе
янындағы Назарет
ҡалаһында йәшәгәндәр.

Ғайсаның тыуыуы

Алла Һүҙеннән, Изге Яҙманан хикәйә

урынлашҡан

1-2 Матве, 1-2 Луки

“Һинең һүҙҙәреңдең асылыуы мәғърифәтле.”
Мәдхия 119:130

Тамам

36

60

Был Изге Яҙма хикәйәһе һеҙҙе бар иткән һәм Уны
танып белеүен теләгән иҫкиткес Алла тураһында һөйләй.

Беҙҙең насар эштәр эшләгәнде Алла белә, һәм был эштәрҙе ул
ғонаһ тип атай. Ғонаһ өсөн яҙа – үлем, ләкин Алла һеҙҙе шул тиклем
ярата, хатта үҙенең берҙән-бер улы Ғайсаны һеҙҙең өсөн тәрелә үлергә
һәм ғонаһтарығыҙ өсөн язаланырға ебәрҙе. Унан һуң Ғайса терелтелде
һәм өйөнә күккә ҡайтты. Әгәр ҙә һеҙ Ғайсаға ышанһағыҙ һәм унан
ғонаһтарығыҙҙы кисереүен һораһағыҙ, ул уны эшләйәсәк. Ул һеҙҙең
тормошҡа инер, хәҙер һеҙҙең күңелдә йәшәр, һәм
һеҙ уның менән мәңге йәшәрһегеҙ.

Әгәр ҙә һин бының дөрөҫлөгөнә ышанһаң, Аллаға былай тип әйт:
Хөрмәтле Ғайса, мин ышанам, Һеҙ Алла һәм минең ғонаһтарым өсөн
үлер өсөн кеше булдығыҙ, терелтелдегеҙ һәм бына хәҙер һеҙ яңынан
тере. Мин хәҙер яңы тормош башлар өсөн, зинһар минең тормошҡа
инегеҙ һәм ғонаһтарымды кисерегеҙ, һәм бер көн барып, мәңге
һеҙҙең менән булырмын. Һиңә буйһонорға һәм Һинең
Балаң кеүек йәшәргә булыш миңә. Амин.

Изге Яҙманы уҡы һәм Алла менән көн һайын һөйләш. Иван 3:16